***Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА,***
***шәҡирә***

# Илһам ҡанаттарын үҫтереүсе


*Фәрхәнә Суракова*

Фәрхәнә Ниғмәт ҡыҙы Сураҡова. Беҙ яратып, үҙ итеп әйткәнсә — Фәрхәнә апай. Бер ваҡытта ла уҡыусыларына тауыш күтәрмәҫ, һәр саҡ ыҫпай, килешле кейенеп, иплә кенә баҫып йөрөүсе, уҡыусыға ниндәй йүнәлештә үҫеү кәрәклеген беренсе дәрестә үк билдәләй алыу һәләтенә эйә булған, тел йәнле, оло йөрәкле уҡытыусы. Улай ғына ла түгел, Остаз.

Ғәҙәттә, һине уҡытмаған уҡытыусылар менән аралар йыраҡ була. Әммә Фәрхәнә Ниғмәт ҡыҙына был ҡағылмай. Мәһәҙей башланғыс мәктәбен тамамлағас, Байназар урта мәктәбе беҙҙе, 12 баланы, 5-се синыфҡа ихлас ҡабул итте. Интернатта ятып уҡыйбыҙ. Урта мәктәпһеҙ күрше-тирә ауылдарҙан 150—170-ләп бала йыйылып китә. Рус теленән диктант яҙҙырткас, өс мәһәҙейҙе рус класына яҙҙылар. Мин дә шулар иҫәбендә. Бәләкәй ауылдан, бәләкәй мәктәптән килгәндәргә бөтәһе лә яңы, бөтәһе лә ҡыҙыҡлы.

Түңәрәктәр теҙмәһенә күҙебеҙ төшә. Синыфташым Әлфиә Шәрипова (ул хәҙер «Йәшлек» гәзитенең баш мөхәррир урынбаҫары Әлфиә Хәмитова) менән Фәрхәнә Ниғмәт ҡыҙы етәкләгән «Йәйғор» әҙәби ижад түңәрәгенә яҙылабыҙ. Башҡорт теленән билдәләр ҙә яҡшы, иншаларҙы 5—6 бит итеп, бер-беребеҙ менән ярышып, сәмләшеп яҙабыҙ. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әхмәт Тимерйән улы Шоғаев (мәрхүм) беҙҙең телгә маһирлыҡты тәүҙә үк һиҙемләп, өҫтәмә эштәр бирә. Дәрестә иншаларыбыҙҙан өҙөктәр уҡып ишеттерә, айырым һөйләмдәргә, үҙенсәлекле образдарға, сағыштырыуҙарға туҡтала. Әле ул ваҡытта мәктәп программаһына инмәгән Рәми Ғариповтың шиғырҙарын аһәңләнеп уҡый, өйҙә уҡырға беҙгә биреп ҡайтара. Ғәҙәттә, үҙе етәкләгән түңәрәккә уҡытыусылар үҙҙәре уҡытҡан синыф уҡыусыларын ғына алыусан. Сөнки һәләт кимәлен дә, холоҡ-фиғелдәрен дә яҡшы беләләр. Фәрхәнә Ниғмәт ҡыҙы беҙҙе түңәрәктең тәүге ултырышында уҡ үҙ итте (әллә беҙ уны микән?!). Хоҙай бирмеш һөнәре уҡытыусы булғанғалыр, Фәрхәнә апай баштан уҡ миңә шиғриәт юлын һайларға, Әлфиәгә хикәйәләр яҙырға, журналистика юлынан китергә тәкдим итте.

Беҙ, «Йәйғор» түңәрәге ағзалары, әҙәби ижад менән генә шөғөлләнмәнек. Ауылдар буйлап фольклор материалдарын, ер-һыу атамаларының тарихын йыйҙыҡ. Беҙҙе төрлө яҡлап үҫтереүгә көс һалды апайыбыҙ: ваҡытында тәнҡит һүҙен дә әйтте, саҡ ҡына уңышһыҙлыҡ булһа, ҡанат ҡуйҙы. 5-се синыф балаһының күңеленә киләсәктә

кем булырын алдан күҙаллап һеңдереү ҡөҙрәтенә лә эйә ине ул. Фәрхәнә апайҙың еңел ҡулынан тәҡдим ителгән шиғырҙарымды «Таң» гәзитенә, республика матбуғатына ебәрә башланым. Ташҡа баҫылған тәүге шиғырым сыҡҡас, үтә ҡанатланып, сәмләнеп шиғырҙар яҙҙым. «Йәйғор» әҙәби ижад түңәрәгенең аҙналыҡ гәзиттәре үҙенә күрә мәктәптең мәғлүмәт үҙәге, рух ойотҡоһо, биҙәге ине. Әле лә шулай. Сөнки Фәрхәнә Ниғмәт ҡыҙы 37 йыл дауамында балаларҙа туған телгә һөйөү тәрбиәләп кенә ҡалмай, уларҙа рух, илһөйәрлек, телһөйәрлек үҫтерә, иңдәренә илһам ҡанаттары ҡуя. Һиҙгер күңелле филолог ойоштороған элекке «Йәйғор», хәҙерге «Ҡаурый ҡәләм» әҙәби ижад түңәрәге районға ғына түгел, республикаға билдәле журналистар, телселәр әҙерләп сығарҙы. Бынан 20 йыл әүәл Фәрхәнә Ниғмәт ҡыҙы башлаған тыуған яҡ фольклорын йыйыу, туплау — мәңгеләштереү эше әле ҙурҙан ҡубып дауам итә. Байназарҙар уғата сос булып сыҡты — улар «Мәктәп яңылыҡтары», «Ҡаурый ҡәләм» исемле ике гәзит сығара. Улар мәктәптең информатика кабинетында Рәмис Мирза улы Буранов тарафынан баҫыла. Шуға күрә байназарҙарҙың уңыш-ҡаҙаныштары, яңылыҡтары район, республика гәзиттәрендә сират көтөп, саңға баҫылып ятмай. Мәғлүмәткә булған һыуһындарын ана шулай «ҡандырырға» өйрәнеп алған улар.

Былтыр Фәрхәнә апай баш ҡаланан ҡанатланып, яңынан-яңы эштәргә илһамланып ҡайтты. Рәсәй Федерацияһының Волга буйы федераль округы буйынса йәш журналистар лигаһы координаторы И.Ю.Карелин, «Яҡтылар биләмәһе» программаһы координаторы Б.П.Булатов әфәнделәрҙән мәртәбәле сараға саҡырыу ҡағыҙы алып, 11-се «А» синыфы уҡыусыһы Дилә Мостафина менән Өфөлә үткән еңеүселәрҙе билдәләү сараһында ҡатнашып ҡайтыу кемгә эләгә һуң әле?! Байназарҙар был ижади бәйгелә — «Яҡтылар биләмәһе» республика үҫмерҙәр ижады конкурсында ҡатнашып, «Һүҙ азатлығы» номинацияһында еңеүсе булыуға ла өлгәшә. Тәүҙә ситтән тороп конкурста ҡатнаша улар — Интернет аша бәйләнешкә сыға. «Ҡаурый ҡәләм»селәр 14 йәш ижадсының китапсығын сығарып өлгөргән, уларҙың презентацияһын да үткәргән. Ауылдағы шағир, сәсәндәрҙең ижадына ла битараф түгел улар — Байназар сәсәниәһе, ил инәһе Шәмсениса инәй Сабитованың да ижад емештәрен туплап, китап сығарғандар, сөнки телдең бәҫен белгән, ижад ҡомары менән янған, уҡыусыларының күңелендәге ижад оҫҡондарын дөрләп яныр усаҡҡа әйләндерер остаздары бар уларҙың.

Бәхетлеләрҙең ҡунағы бер көндә, ти халыҡ. Фәрхәнә Ниғмәт ҡыҙы 2005 йылда район буйынса үткәрелгән «Иң шәп синыф етәксеһе» ярышында ла беренсе урынды яуланы. Уңыштың да ишле килеүе — бәхетлеләр өлөшө.

Эйе, күңелебеҙгә ижад ойотҡоһо һалған яратҡан уҡытыусыбыҙ Бөрйән районының иң киткес матур төбәгендә — Брәтәк ауылында тыуған. Фәрхәнә апайҙың атаһы Ниғмәт ағай заманына күрә уҡымышлы колхоз етәксеһе, әүҙем йәмәғәтсе, бөтә яҡтан килгән кеше була. Әсәһе Мәрхәбә апай балаларының күңелен үҫтереүгә, уларҙы һәр яҡтан камил зат итеүгә күп көс һала. Белорет педагогия училищеһын тамамлағас, йәш белгес Ишембай районына эшкә китә. Унда ул уҡытыу-тәрбиә, йәмәғәт эштәренә башкөллө сума. Белемен артабан камиллаштырыу ниәте менән Башҡорт

дәүләт университетының филология факультетына ситтән тороп уҡырға инеп, ҡулына диплом алғас, 1976 йылда Бөрйән районының иң ҙур ауылы Байназарға башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшкә килә. Ҙур коллективта ла үҙенә тоғро ҡала ул: бөтә көсөн, йәшлек дәртен уҡыусыларында туған телгә ҡарата һөйөү, ихтирам уятыуға бирә. Бөгөн юғары уҡыу йорттарының филология факультетында уҡыған студенттарҙың байтағы Фәрхәнә Ниғмәт ҡыҙы ҡулында уҡыған. Төп эше менән бер рәттән, мәктәптең драма түңәрәгенә йөрөй, ауыл ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе, ата-әсәләр комитеты йөгөн тарта. Мәктәптә кабинет системаһы индерелгәс тә, беренселәрҙән булып был етди эшкә тотоноп, кабинеттар араһында үткәрелгән ярышта еңеүсе призына лайыҡ була. Ауылдың тарихын, шәжәрәһен өйрәнеүҙе лә тырыш уҡытыусы ҙур яуаплылыҡ менән башҡара. Ул уҡытҡан фәндәрҙән уҡыусылар 100 процент өлгәш, 70—80 процент сифат бирә. 2003—2004 уҡыу йылында уның уҡыусыһы Дилә Мостафина Салауат Юлаевтың тыуыуына 250 йыл тулыуға арналған республика конкурс-викторинаһында призлы урын алһа, «Урал батыр» конкурсында тағы бер уҡыусыһы Инсур Кинйәкәев 1-се урын алыуға өлгәшә. «Авторлыҡ ҡобайыры» номинацияһында ла уның уҡыусылары һынатмай, район, республика бәйгеләренә сыға. 2004—2005 уҡыу йылында Наркоманияны, тәмәке тартыуҙы һәм эскелекте иҫкәртеү йылына арналған республика иншалар конкурсында 9-сы «А» синыфы уҡыусыһы Лилиә Батырова 1-се урын ала.

2005 йыл Фәрхәнә Ниғмәт ҡыҙы өсөн бик емешле була. Йыллыҡ ижади отчет тотоп, үҙенең тәрән йөкмәткеле, уҡыусыларҙың аң-белем даирәһен үҫтереүгә йүнәлтелгән бай дәрестәре менән коллегаларын тағы бер һөйөндөрҙө ул. «Шағирҙар үҙ ерендә пәйғәмбәр була алмай» (Таңһылыу Ҡарамыш ижады буйынса), «Һәҙиә Дәүләтшина — рух бәһлеүәне», «Милләтеңдең киләсәге — айыҡлыҡта» һәм башҡа дәрестәре уҡыусылар, уҡытыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Үрҙәр артынан үрҙәр яулаһа ла, ирешкәндәре менән мөрхәтһенмәй, камиллыҡҡа ынтыла уҡытыусы — 2001—2005 йылдарҙа Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты үткәргән курстарҙа булып, рефераттар яҙа.

Ғаиләһе лә үҙенә һәр саҡ ҡәлғә булырлыҡ: ире Рәмил ағай — донъя тотҡаһы, терәк-ҡалҡаны. Ике ҡыҙы ла, әсәһе кеүек, уҡытыусы һөнәрен һайлаған: Гөлдәр Бөрө пединститутының биология факультетын тамамлаған. Үҙенең яратҡан эшен тапҡан, үҙ ояһын ҡорған. Дилбәр БДУның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетының башҡорт-сит телдәр бүлегендә белем ала.

Үҙ балаларына ла, үҙенекенән артыҡ күреп бөтә күңелен, ғүмер йылдарын арнаған уҡыусыларына ла, коллегаларына ла һәр саҡ ярҙамсы, оло кәңәшсе, остаз ул Фәрхәнә апай. Быйылғы йылда уның «Мәғариф» өҫтөнлөклө милли проектының Рәсәй Президенты премияһына тәҡдим ителеп, ошо мәртәбәле премияға лайыҡ булыуы икеләтә ҡыуаныслы. Бындай уңыштарға Фәрхәнә апай фәҡәт Хоҙай биргән һәләте, фиҙакәр хеҙмәте менән ирешә. Тел һағында уяу торған остазыбыҙҙың йәш быуынға әйтер һүҙе, ҡәләмгә маһирҙарҙың күңеленә илһам орлоҡтары һибер көс-кәре, дәрте бар әле, шөкөр. Фәрхәнә Ниғмәт ҡыҙына киләсәктә лә уңыштар, һаулыҡ, бәхет, ғаилә именлеге насип булһын.